Дәрес темаһы:	Ҡышҡы уйындар.
Дәрес төрө:	Яңы материалды өйрәнеү.
Дәрес маҡсаттар:	**Белем биреү**: тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, дәрестән тыш эшмәкәрлек тураһында һөйләшеү. **Үҫтереүсе:** фекерләү һәләтен, тыңлап аңлау, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. **Тәрбиәүи:** спортҡа һөйөү, бер – береһенә ҡарата ихтирамлылыҡ тойғоларын тәрбиәләү.
Көтөлгән һөҙөмтәләр:	Предмет УУЭ һөҙөмтәләре: нимә эшләйем? Һорауына яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, телмәрҙә ҡулланыу. Метопредмет(предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре: а) регулятив: уҡытыусы менән бергә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләргә күнегеү, булған белемдәрен барлау, баһалау; б) танып белеү: кәрәкле мәғлүмәтте айыра, дөйөмләштерә, һығымта эшләй белеү; в) коммуникатив: һөйләмдәр төҙөү, парлап диалог ҡороу, үҙ-ара аралаша, тасуири уҡый белеү. Шәхес булараҡ формалаштырыу УУЭ һөҙөмтәләре: уҡыған мәктәпкә ыңғай ҡарашлы, иптәштәрен, уҡытыусыларҙы, класс эштәрендә әүҙәм ҡатнашыусы, дәрестә башҡарған эштәре өсөн яуаплылыҡ тойоусы, тырыш, әҙәпле, уҡыуға, белем алыуға ынтылыусы шәхес тәрбиәләү.
Йыһазландырыу:	“Башҡорт теле” дәреслеге, “Мин дәрестән сыҡтым” темаһына слайдтар, билеттар, карта, карточкалар, 2-се класс өсөн электрон дәреслек.

Дәрес барышы.

Дәрес этаптары	Уҡытыусы эшмәкәрлеге	Уҡыусылар эшмәкәрлеге	
1.Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу.	1.- Һаумыһығыҙ! Хәйерле иртә! 2. Артикуляцион күнегеү(электрон дәреслектән артикуляцион күнегеүҙе ҡулланыу). Хәҙер уҡыусылар иғтибар менән бында ҡарайбыҙ.**(слайд № 1 - 8 кышҡы тәбиғәт)** Слайдттарҙа йылдың ҡайһы миҙгеле күрһәтелде ? (ҡыш миҙгеле) Дөрөҫ, Афарин. Ҡыш миҙгеле башҡа миҙгелдәрҙән нимәһе менән айырылып тора ? (ҡар яуа, һыуыҡ,ҡар бөртөгө). Афарин уҡыусылар**.** Әйҙәгеҙ ошо ҡар бөртөгөн устарыбыҙға алайыҡ. (уҡытыусы күрһәтә) Иплэп кенә өрәйек.(өөөффф) (подуем) Тағы ла көслөрәк өөөффф Бар көсөбөҙҙе йыйып тағы ла көслөрәк өрәйек (өөөффф) **.** Уҡыусылар ҡарағыҙ әле ниндәй матур, шаян ҡар йомғағы (снежний ком) барлыҡҡа килде. Был ҡар йомғағы ябай түгел. ә тылсымлы. Уҡыусылар нисек уйлайһығыҙ, бөгөн беҙҙең дәресебеҙҙең темаһы нисек атала ? (Ҡыш) Эйе, бөгөнгө дәресебеҙҙең темаһы **Кыш һәм кышҡы уйындар .**	Уҡытыусы менән башҡорт телендә һаулашалар. Хор менән ҡабатлайҙар.	Р.: үҙҙәренең уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора белеү, яҡшы, продуктив эшкә ынтылыш формалаша. Ш.: белем алыуға, уҡыуға ҡарата ыңғай ҡараш формалаша.
2. Өйгә эште тикшереү.	Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. -Был шығыр юлдарында ниндәй таныш һүҙҙәр бар?	Уҡыусылар үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрә, һорауҙарға яуап бирә.	
3. Уҡыу мәсьәләһе	имәк ниндәй маҡсаттар ҡуябыҙ ? Русса әйтһәгеҙ ҙә була.	Һорауҙарға яуап бирәләр.	Ш.: уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация, уҡыуға, яңылыҡ белеүгә

н ҡуйыу.	Бөгөнгө беҙҙең маҡсатыбыҙ ....(1 мин) Ҡыш һәм ҡышҡы уйындар тураһында һөйләшербеҙ. Яңы һүҙҙәр өйрәнербеҙ.	Дәрестә нимә тураһында һөйләшеүҙәре тураһында әйтәләр.	ынтылыш, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ формалаша. Р.: уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләргә өйрәнәләр. Т.б.: логик фекер йөрөтөү, уҡыу мәсьәләһен табыу, күрһәтә белеү формалаша.
4. Яңы материалды өйрәнеү. Ял минуты. 6. Белемдәрҙе нығытыу(яңы белемде практикала ҡулланыу)	Беҙҙең тылсымлы ҡар бөтөгө беҙҙе уйнарға саҡыра. Беҙ һеҙҙең менән ҡар бәрешеп уйнап алабыҙ. Ҡар бәрешеү уйыны. (һүҙҙәрҙең тәржемәһе) Ҡар бөртөгө – снежинка Саңғы – лыжи, снежный ком – ҡар йомғағы Боҙ - лед, көрт – сугроб, ҡар бабай – снеговик ҡар бәреү – кидать снежный ком тау хужаһы – хозяин горы шыуыу – кататься **Ял минуты:** - Тышта ҡар яуа, ҡар яуа. - Ниндәй саф һауа, саф һауа! - Әйҙә сығайыҡ, сығайыҡ. - Саңғы шыуайыҡ, шыуайыҡ. - Ҡырға барайыҡ, барайыҡ. - Юлдар ярайыҡ, ярайыҡ. - Биттәр ал булыр, ал булыр. - Күңелле ял булыр, ял булыр. 45-се биттәге күнегеүҙәрҙе үтәү.		К.: диалогка инергә, һорауҙарға яуап бирергә, башҡаларҙы тыңлай һәм әңгәмәгә ҡушыла белергә, һөйләмдәр төҙөргә өйрәнәләр. Т.б.: яңылыҡ белеүгә ынтылыш формалаша Ш. : уйында ҡатнашыу мәҙәниәте фомалаша, уҡыу материалына ҡыҙыҡһыныу арта. Р.: уҡыу мәсьәләһен аңлау, кабул итеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү формалаша. К. : һорауҙарға яуап бирергә, башҡаларҙы тыңларға, һөйләмдәр төҙөргә, әңгәмәгә ҡушылырға, үҙҙәренең фекерҙәрен әйтергә өйрәнәләр.
7. Өйгә эш.	Шиғырҙы тсасуири уҡыу.	Көндәлеккә өйгә эште яҙалар.	
8. Дәресте йомғаҡлау. Эшмәкәрлеккә рефлексия.	- Шулай итеп, бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләштек? Ниндәй һорауға яуап бирергә өйрәндек? Бөгөнгө дәрестән һуң кем әйтер: *Дәрестә мин ... белдем.* *Мин ... өйрәндем.* *Миңә дәрес оҡшаны? (оҡшаманы)* - һөйләмдәрҙе тултырып әйтегеҙ.	Уҡыусылар яуап бирәләр. Нимәгә өйрәнеүҙәре тураһында әйтәләр. Уҡыусылар үҙҙәренең эштәрен баһалайҙар.	Р.: үҙҙәренең эшмәкәрлегенә баһа бирә белеү, укытыусының баһаһына адекват ҡараш формалаша. Ш.: үҙүҫеш, баһалау күнекмәһе үҫешә.

Тышта ҡар яуа, ҡар яуа.
Ниндәй саф һауа, саф
һауа!
Әйҙә сығайыҡ, сығайыҡ.
Саңғы шыуайыҡ,
шыуайыҡ.

Ҡырға барайыҡ,
барайыҡ.
Юлдар ярайыҡ, ярайыҡ.
Биттәр ал булыр, ал
булыр.

Ҡар бөртөгө – снежинка
Саңғы – лыжи,
снежный ком – ҡар йомғағы
Боҙ - лед,
көрт – сугроб,
ҡар бабай – снеговик
ҡар бәреү – кидать снежный ком
тау хужаһы – хозяин горы
шыуыу – кататься